С(Баш)
К97

Мостай Кәрим

# Минең атым

Өфө—Башгосиздат

К9

МОСТАЙ КӘРИМ

# МИНЕҢ АТЫМ

38615

ӨФӨ -БАШГОСИЗДАТ- 1943

## ЙӨКМӘТКЕҺЕ


Би

Минен атым . . . . . . .
Бәхет йондоҙҙары . . . . . .
Ай . . . . . . . . .
Трубка . . . . . . . .
Мин фронтка китәм, иптәштәр . . . .
Рус кыҙы . . . . . . . .
Тәҙрәнде ас та... . . . . . .
Декабрь йыры . . . . . . .
Баллада . . . . . . . .
Үлмәҫбай . . . . . . . .



Яуаплы редакторы Б. Бикбай. Техредакто
Х. Мохтар. Корректоры С. Мазитова. Баҫы
ға кул куйылды 16.09.43 Күләме $1^1/_4$ баҫма таб
Тиражы 3000. Заказ № Б-231.

П 1736. „Октябрь натискыһы“ типографияһы, Өс
Володарский ур., 2.

## МИНЕҢ АТЫМ

Ҡаҙ ҡанаты ҡат-ҡат була,
Ир ҡанаты ат була...

Аҡбуҙымды мин төшөмдә күрҙем:
Тарһынып киң ҡырҙар ирееген,
Ярһынып ул, башын сайҡай-сайҡай
Асып инде бүлмәм ишеген.

Атым телгә килде:
«Өс ай инде
Ауыҙлыҡһыҙ минең йөгәнем,
Өс ай инде,
Аҡ күбеккә батып,
Яландарҙа яңғыҙ еләмен.

Өҙгөләнә елдәр, хәтәр елдәр
Һин ялыма үргән таҫманы.
Өс ай инде,
Ләкин өҙәңгемә
Ят кешеләр аяҡ баҫманы.

Мин ант иттем тугайҙарға ҡарап.
Мин күлдәргә ҡарап ант иттем:
— Бер үҙеңә генә тогоро атмын, —
Башҡаларҙы шуға ят иттем.

Һин һауыҡһаң ине.
Дуҫһыҙ ауыр,
Әҙләп килдем эсем бошҡанға;
Һинең ҡаның өсөн үс алырға
Атылаһы ине дошманға!

Өҙәңгемә һин һикереп баҫһаң,
Дәртем таша ине шул саҡта,
Күкрәгемә йөрәк һыймай ине.
Ә хәҙер һин минән йыраҡта...»
Ҡапыл ул юғалды...

Доктор, доктор, һауыҡтырсы мине,
Ауырырға хаҡым бармы ни? —
Яландарҙа яңғыҙ елеп йөрөгән
Эйәрләнгән атым бар минең!..

3 декабрь, 1942 йыл. Госпиталь.

———

# БӘХЕТ ЙОНДОҘҘАРЫ

Ҡараңғылыҡ, өлкән бөркәт һымаҡ,
Яландарға ҡарап өлпөнде,
Елбеҙәкле зәңгәр яулыҡ булып,
Йондоҙло күк япты төн битен.

Ҡалҡыулыҡта, үйһыулыҡта атака!
Мәңгелектән өҫтән минуттар,
Туп шартлауы булып үлем көлә,
Һәм уттар, һәм уттар, һәм уттар!..
Ер яна!

Яу эсендә мин арыҫлан инем, —
Мин Уралда тыуған егетмен —
Бына хәҙер сафтан йығылып ҡалдым,
Әллә тере, әллә үлекмен.

«Ер ҡотҡарһа ине ҡосағынан,
Һикереп менһәм ине юрғаға!
Уйҙар елә, үҙем өнһөҙ ятам,
Ҡан аға, ҡан аға, ҡан аға!..

Тыуыуым менән яңы замандың мин
Иң бәхетле көнө-ҡорҙашы,
Бына шуға
Минең ғүмеремдең
Яҡты йондоҙ булды юлдашы.

Һәм ул йондоҙ
Үлем ҡосағынан
Тартып алыр үҙенең егетен,
Елбеҙәкле яулыҡ булып һаман
Болотһоҙ күк яба төн битен.

Ана, ана!
Йондоҙомдо таптым,
Ул ағылып төшөр яныма:
Сеү! Ниңә ул аҡрынлап һүнә?
Ә ҡабынырмы һуң тағы ла?
Ҡараңғылыҡ...

Яңағымда йылы тын һиҙәм мин
Һәм һаташып асам күҙемде.
Ят өн әйтә:
«Уян, егет, уян,
Мин ҡотҡара килдем үҙеңде!»

Һәм мин тоям
Төн ҡараһы аша
Ул күҙҙәрҙең йылы ҡарашын:
Бына улар —
Яҡты йондоҙҙарым!
Бәхет ҡошом йәйә ҡанатын.

Тоноҡ, өнһөҙ, һалҡын метеор булып,
Күк йондоҙо атылып төшмәһен!
Сөнки ерҙә, был күҙҙәрҙә таптым
Һауыҡтырғыс нурҙар шишмәһен.

Кем һин, ҡыҙҡай, кем һин?
Мин белмәйем,
Ниндәй шишмә һыуын эскәнһең,
Кем исеменә ниндәй йырҙар йырлап,
Ҡайһы туғайҙарҙа үҫкәнһең?

Тик танышым туған Россиямдың
Мендәр араһынан бер ҡыҙын,
Мин таныйым
Миңә ғүмер биргән
Еремдәге бәхет йондоҙон!

**28 ноябрь, 1942 йыл**
**Госпиталь**

## АЙ

*Сәғит Мифтах иҫтәлегенә.*

Көнбайышҡа табан үтте
Ерҙе, күкте ялмап ут;
Ә хәҙер тамуҡ тынлығы
Мендән бер генә минут.

Төн. Атака уҙған ҡырға
Һуңлап китек ай төштө,
Ул тыныс ҡына эйелеп,
Таныщын эҙләй төҫлө.

Сал комиссарҙы тапты ул
Үлектәр араһында,
Тик ҡыҙғаныу ҙа, ҡайғы ла
Юҡ ине ҡарашында.

Ниҙер хәтерләргә теләп,
Бик оҙаҡ уйланды ай,
Ә һуңынан ағып китте
Йыраҡ илдәргә ҡарап...

Комиссар... Күп йылдар элек
Ул матур һәм йәш ине;
Мөхәббәте бәләүендә
Буласаҡ кәләш ине.

Уларҙы солғаған ине
Яҙғы баҡса, төн генә;
«Бәхет... Бәхет!..» — ҡабатланы
Төнгө татлы өн генә.

Мәңгелек үтәме, әллә
Секундмы? — һиҙмәнеләр,
Тик ай йөҙөнән һоҡланыу,
Йылмайыу эҙләнеләр.
Ах, юҡҡа, юҡҡа! Ай мәңге
Тоноҡ һалҡын гәрәбә;

Унда бер ҡараш һөйөүгә,
Бер ҡараш үлемгә лә.

**Көнбайыш фронты.**
**Октябрь.**

## ТРУБКА

Фронтовиктең күңелен табам,—типме,
Мохтажынмы белеп юғиһә,
Трубка һалған миңә бүләк итеп
Ирәндегем ҡыҙы Нәфисә.
Ҡош теләндәй ҡайнар сәләм хаты —
Йәш бер ҡыҙҙың йөрәк ялҡыны:
«Һаҡла тыуған илде, ғүмереңде
Һәм трубканды һаҡла, алтыным!..»
Ете атакала еңеп сыҡтым,
Ете яуҙа еңеп һау ҡайттым,
Ышанысын һаҡлап ут уйнаттым,
Ә трубканды, һылыуым, юғалттым.
Трубка. Ул да тыуған ил тамсыһы,
Мин ҡыҙғанмас инем юғиһә—
Ҡош теләндәй хат һалмаған булһа
Ирәндегем ҡыҙы Нәфисә.

**Көнбайыш фронты.**

## МИН ФРОНТКА КИТӘМ, ИПТӘШТӘР

Эйәрләне атам,
Ялын үреп,
Аҡбуҙ аттың ярһыу ап-ағын,
Әсәм һуҙа алмаз ҡылысымдың
Ҙур яуҙарҙа еңеп ҡайтҡанын.
Ышан, атай, һин эйәрләп биргән
Аҡбуҙ атым менән абынмаç,
Йәшең тамған был ҡылысты, әсәй,
Һуғарырмын дошман ҡанына.
Йыуырмын мин немец йәше менән
Илем күкрәгенең яраһын,
Ҡайыра алмаç ҡаты дауылдар ҙа
Үс һәм нәфрәт биргән ҡанатым.
Ҡартлығын һаҡлап ҡарттарымдың,
Һылыуҙарын һаҡлап илемдең,
Бөйөклөгөн һаҡлап Уралымдың
Гүзәллеген, һаҡлап Иҙелдең
Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!
Тыуасаҡ таң, тыуасаҡ яҙ өсөн,
Яҙын япраҡланыр гөл өсөн,
Тыуыр балам, йырланыр йыр өсөн,
Йыр өсөн һәм тыуған ер өсөн —
Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!

---

## РУС ҠЫҘЫ

Хәсрәт тапап уҙған был ерҙәрҙә,
Был илдәрҙе ялҡын ялмаған,
Ауыр енәйәттең эҙе булып
Ҡара күмер, ҡара ҡан ҡалған.
Төтөн йотоп, асыу утын йотоп,
Батып тиргә, тояҡ саңына,
Күбекләнгән атта беҙ үтәбеҙ
Байып барған ҡояш яғына.
Танк йәнсеп үткән өй янында
Төтәй һуңғы ҡаҙыҡ-бағана,
Шул бушлыҡта яңғыҙ тора ине
Хәсрәт баҫҡан йөҙлө ҡыҙ бала.
Ҡанатланған кеүек ҡалҡынды ҡыҙ,
«Беҙҙекеләр!..» тине, ҡул сапты,
Ул йылмайҙы ауыр ҡайғы аша,
Күҙен алмай беҙҙе оҙатты.
Был ҡыҙ — Россияның күңеле ине,
(Рус күңеле — шиңмәҫ гөл ине)
Был йылмайыу йыраҡ Урал аша,
Мәскәү аша килер көн ине.

---

## ТӘҘРӘНДЕ АС ТА...

Йәшеренмә һин йәшендән,
Дауылдан ҡасма,

Йәйҙең хәтәр төндәрендә
Тәҙрәңдә ас та —
Күкте күҙәт, тирбәндермә
Керпек осондо,
Бик яҡын итеп хәтерлә
Йыраҡ дуҫыңды.
Йәшен юйһын бүлмәңдәге
Төндөң ҡараһын,
Һибелдереп сәстәреңде
Дауыл тараһын.
Дауыл... дауыл! — ул бит минең
Тере хәбәрем,
Яҡын йәшен, яҡты йәшен —
Минең сәләмем.
Мин һуларымын, ерҙә дауыл —
Тынмаһа әгәр,
Мин яңырмын һуңғы йәшен
Һүнгәнгә ҡәҙәр!

---

## ДЕКАБРЬ ЙЫРЫ

### 1. ЙЫРҘЫН БАШЫ

Һауала ҡайнап үкерә,
Дыулай декабрь,
Хас өйөрмә оянындай
Утлы йомғаҡ — ер.

Һоро болот түбәнәйә
Ҡырҙарға табан,
Ләкин ул ҡар булып түгел
Ут булып тама.
Ерҙе әйләндереп көлгә
Ҡара тупраҡтан, —
Үрмәләй аждаһа илгә
Көнбайыш яҡтан.
Был аждаһа ғәрәсәте —
Ағыулы ялҡын;
Тир, ҡанға батып алыша
Ҡаһарман халҡым.
Әкиәттәрҙә лә юҡ батыр
Халҡымдан ашҡан —
Ике аяғын ике диңгеҙ —
Ярына баҫҡан.
Ҡәүҙәһе менән ҡаплай ул
Аждаһа юлын,
Үлмәҫ батырҙың күкрәге —
Ул минең быуын.

## 2. МИНЕҢ ОКОП

Ике диңгеҙ араһында
Һанһыҙ окоптар,
Ике диңгеҙ араһында
Минең окоп бар.

Өс тәүлек минең окопҡа
Ут, металл яуа,
Өс тәүлек башым өҫтөндә
Ал шәфәҡ яна.
Сәғәтләп түгел, минутлап
Бой ҡыҙа һаман,
Иҫерек һаташыуы менән
Ташлана дошман.
Белә тыуған ил һәм даһи,
Белә армия,
Был иң һуңғы оборона,
Һуңғы линия.
Беләм мин, был һуңғы окоп
Ҡөнбайыш сиктә,
Биш йөҙ саҡрым сиктем, хәҙер
Биш аҙым сикмәм!
Был — окоп түгел, крепость,
Был — минең ватан,
Был — минең быуын яҙмышы,
Намыҫ, ирк һәм дан!
Был — окоп — атамдың өйө,
Мин үҫкән урам,
Был окоп еңеү усағы —
Мәскәү һәм Урал!
Ялҡын өйөрмәһе ҡаплай
Дошмандың юлын,
Иң беренсе линияла

Ул минең быуын!
Һәм беләм мин оло еңеү
Ҡорбанһыҙ килмәҫ,
Ләкин Тимербаев Юлдаш
Еңеүһеҙ үлмәҫ.
Еңергә тыуҙым. Һәм шулай —
Үҫтерҙе илем,
Юлдашҡа юлдаш була алмаҫ
Данлыҡһыҙ үлем.

3 МИНЕҢ ТЫУЫУЫМ

Дәүерҙәрҙә ҡабатланмаҫ
Берҙән-бер төндә —
Ер ишеткән тәүге тапҡыр
Был яңы өндө:
Мин тыуҙым. Был минең тауыш,
Тик илау түгел,
Мин тыуҙым һәм хәбәрләйем
Донъяһын, күгең!
Был минутта айыу булып
Үкергән урман,
Был минутта Ирәндек тау
Ҡалтырап торған.
Томан таралған, болоттар —
Иреп юғалған,
Күк бейегәйгән, йондоҙҙар —

Яҡтырак янған.
Был минутта ярҙан ташып
Сайҡалған күлдәр,
Минең өндө бар донъяға
Тараткан елдәр.
Тыуҙы ул. Ни тип ҡушырға
Исем уланға?
Кендек әбейе тын ғына
Сыға урамға.
Ул күрә: шул уҡ тоноҡ төн
Боронан ҡалған,
Тау—йоҡолағы баһадир,
Күл — көмөш ҡалкан.
Әбей күҙ ташлай йыһанға:
Төнгө күк һәм ер,
«Ниндәй исем был баланы
Бәхетле итер?
Әгәр анау таштан алһаҡ
Баланың атын?
Тар булһа һуң уның күңеле,
Таш һымаҡ ҡаты?
Кемдең күңеле тар, шул кеше
Һөйөнә белмәҫ,
Кемдең күңеле таш, ул кеше
Көйөнә белмәҫ.
Мөхәббәт бәхетен татымаҫ,
Ғүмере буш булыр.

Нәфрәтләнә белмәй торған
Бер байғош булыр.
Күктә тулы ай. Балаға —
Айсыуаҡ ҡушһаҡ?
Бик ҡыҫҡа булһа ғүмере
Ошо ай һымаҡ?
Ҡара болот ҡаплағанда
Айлы төн күген,
Ауыр ҡайғы баҫҡан булыр
Шат бала күңелен.
Ана юл ялтырап ята,
Гүйә саҡма таш,
Хәйерле мәлгә тап килһен
Был исем — Юлдаш!
Бик оҙон булһын ғүмере
Был юлға оҡшаш,
Ошо юлдай нурлы булһын
Ғүмерең, Юлдаш!
Яҡты юлың дандың бейек
Тауына үгһен,
Оҙон ғүмерең, бәпесем,
Бәхетле итһен!..»

Тик ул ишетмәне алыҫ
Туптар шартлауын,
Ул һиҙмәне киң яҙ буйлап
Заман атлауын.



3861/5

Ут, ялкын эсендә яңы
Был заман тыуҙы.
Һәм токомға тиңдәш булып
Уҙаман тыуҙы.

## 4. ТӨПСӘК БАЛАҒА

Ҡабыҡ бишек өй башынан
Һуңғы ҡат төшкән,
Ошо бишектә тирбәлеп,
Өс быуын үҫкән.
Дыулап тирбәлә йәш бала
Муйыл сиртмәлә,
Төпсөк тыуҙы. Уңы менән
Ҡилһен иртәгә.
Бешге ырыу ҡыуағының
Һуңғы емеше,
Бәлки ул яңы ырыуҙа
Иң тәүге кеше?
Ошо мәлдә әсәм ниҙәр
Уйланы икән?
Ни уйлаһын? Был бишектә
Өс быуын үҫкән.
Ҡыҫыҡ биләүгә өс быуын
Шулай биләнгән;
«Яҙмыш бығауына йәштән
Күнек!» тигәндер.

Татыған бала биләүҙә
Ғазап барлығын,
Иге-сиге юҡ донъяның
Сикһеҙ тарлығын.
Ошо мәлдә әсәм ниҙәр
Уйланы икән?
Ни уйлаһын? Нужа ағыуын
Өс быуын эскән.
Донъяға берҙән-бер һуҡмаҡ
Шунан атлаған.
Өс быуын... ләкин һуҡмаҡта
Бәхет ятмаған.
Көткәндәр: «алтын ҡош ҡуныр
Беҙҙең ҡапҡаға!»
Көткәндәр; ләкин сәүкә лә
Ҡанат ҡаҡмаған.
Күккә ҡарап, улар күпме
Хыял һаҡлаған!
Тик уй ҡарға ояһынан
Бейек осмаған.
Уларға иң юғары күк,—
Иртәнге аҙан.
Шулай йәшәгән өс быуын
Бик оҙаҡ заман.
Ошо мәлдә әсәм ниҙәр
Уйланы икән?
Ни уйлаһын? Был һуҡмаҡтан

Өс быуын үткән.
Ни ғәжәп? Сепрәк биләүҙе
Тарһына төпсөк.
Һыймай ҡабыҡ бишегенә,
Ярһына төпсөк.
«Хас түгел төпсөк — ырыуға,
Ниңә һуң былай?
Бәлә-ҡазанлан бер үҙең
Һаҡласы, хоҙай!»
Һиҙмәне эсә, ут аша
Атланы заман.
Яңы тоҡомға тиң булып
Тыуҙы уҙаман.

## 5. КОСТЕР ЯНЫНДАҒЫ ТӨН

Тау артынан күтәрелде
Йәшәргән ҡояш.
Тәүге нуры мине ҡосто:
«Ҡотло бул, Юлдаш!»
«Ҡотло бул, Юлдаш, ҡотло бул!» —
Ҡабатланы ел.
«Ҡотло бул!» Шауланы ҡырҙар,
Шауланы бар ил.
Төндәр буйы ай һаҡланы
Тыныс йоҡомдо,

Бишегемә гәүһәр булып,
Йондоҙ ҡойолдо.
Һуҙҙы яҙ миңә букетен
Аҫыл гөлдәрҙән,
Торналар тәпәй килтерҙе
Алыҫ илдәрҙән.
Йырланы турғай күктәрҙә,
Ағарҙы муйыл.
Әйткәндер, бәлки, олатай:
«Ниндәй изге йыл!»
Ниндәй изге йыл! Яланда —
Сайҡала иген!
Кешеләр ҡыуанысының
Юҡ иге-сиге!
Күбәләктәй үстем. Күрмәнем —
Тормош тарлығын.
Һәм белмәнем мин донъяла
Ҡайғы барлығын.
Үтте балалыҡ, әйтерһең
Ул йәйге болот,
Төнгө костёр янындағы
Әкиәт булып.

## 6. УН ЕТЕНСЕ ЯҘ

Тирбәлә башым өҫтөндә
Ун етенсе яҙ,

Көн күцелем кеүек, ә уйҙар
Көн кеүек аяҙ.
Мин сығып киттем. Кескәй тоҡ
Арҡала ине.
Өмөт Иҙеле хыялда
Тулҡына ине...
Тау аша йыраҡ ерҙәргә
Ташлы юл үтә, —
Ошо тау артында мине
Ҙур донъя көтә.
Зәңгәрлеккә күмелеп ҡалды
Мин үҫкән ауыл,
Аяғым аҫтында миңә
Исем биргән юл.
Хушлашҡанда әйтте әсәй:
«Йә һау бул, бала,
Яҡшы һүҙ ишетке килә
Һинең турала!»
Күрһәтте атай: «Алдыңда
Изге юл, бала,
Дан һүҙен ишетке килә
Һинең турала!»
Йәшәреп бойҙай ҡырҙары
Елгә елпенә;
Башта уйҙар... уйҙар... уйҙар!..
Уйҙар елкенә.
Кем итер мине тыуған ил,

Ҡем итер быуат?
Ҡайһы хеҙмәт хужа итер?
Ҡайһыһы — ҡунаҡ?
Тормошҡа ҡунаҡҡа түгел,
Ә эшкә киләм,
Мин һыбайлы булһам, хеҙмәт —
Югерек ерән.
Теләһәң, уйҙар осошо
Емеш килтерһен,
Теләһәң һин ҡоштар юлын
Һуҡмаҡ итерһең.
Тирбәлә башым өҫтөндә
Ун етенсе яҙ,
Көн күнелем кеүек, ә уйҙар
Көн кеүек аяҙ.
Мин барам. Алдыма ятып,
Югерә шәүләм.
Ни йәм бар шәүлә хужаһы —
Булып йәшәүҙән?
Йәшәйһе ине тормошта,
Шулай йәшәйһе!
Һинең шәүләң барлығын да
Һиҙмәһен кеше!
Мин сығып киттем. Ҡескәй тоҡ
Арҡала ине,
Өмөт Иҙеле хыялда
Тулҡына ине.

## 7. ТАН

Ғәмһеҙ балалыҡтамы ни
Ғүмерҙең таңы?
Серле зәңгәр кис—кешенең
Балалыҡ сағы:

Тормош — уйналмаған гармонь,
Йырланмаған моң.
Ул серен һаҡлай үҙендә
Төнгә урмандың.

Балалыҡ — йә асыҡ аҡыл,
Йә тотош хыял,
Йә ул арыҫланға оҡшай,
Йә ҡурҡаҡ ҡуян.

Һанама, бала, күгендә
Йондоҙҙар һанын,
Гүзәл кисең хәбәр итә
Ғүмерең таңын.

Күрәм аяҙ күк ситенә
Таңым йәйелә,
Ул күк — минең ғүмер, күрәм:
Йәшлегем килә.
Тап иттем таң ҡыҙҙарының
Мин бер һылыуын,
Эстем һөйөү шишмәһенең
Иҫерткес һыуын.

Беҙ диңгеҙ булһаҡ, күл ине
Фәрһад һәм Ширин.
Был һөйөү менән үлемһеҙ
Йәшәргә мөмкин.

## 8. ЕҢЕҮҘЕҢ БАШЫ

Ҡалтырап ағара тағы
Ҡояш тыуған яҡ.
Был таң — мәңгелек юлында
Бер яҡты маяҡ.
Бала ине киске дауыл,
Ә таңғы — әсә,
Тик ул хәҙер көнбайышҡа
Ялҡынын сәсә.
Гүйә ғәйрәтле ҡул борҙо
Заман ҡанатын,
Юғәнләне ваҡиғаның
Тыңлауһыҙ атын.
Һауыҡты яралы һалдат,
Хәлһеҙ хәл алды,
— Атака! — бар фронт буйлап
Тик бер команда.
Дошман үтер бында үҙенең
Иң һуңғы юлын,
Сөнки алғы сафта барған
Ил минең быуын!

Еңеү тыуын яулап алыу
Еңелдән булмаç,
Тик еңелеп ҡайтмаç илгә
Рядовой Юлдаш.

22 декабрь, 1942 йыл.
Госпиталь

---

## БАЛЛАДА

Зәңгәр күк тәрәнлегендә
Тулған ай йөҙә,
Һағына һалдат һөйгәнен
Ят, йыраҡ ерҙә.

Кем белә? (Ошо мәл шаһит
Тик төн беҙгә).
Өҙөләлер яңғыҙ ҡалған
Йәш ҡыҙ үҙәге.

Айҙан күҙен алмай һылыу
Был гүзәл төндә
Тын торалыр, таңға тиклем,
Тәҙрә төбөндә.

Бүленде һалдат һағышы
Иң татлы хыял;

Ул һиҫкәнеп һөрән һалды:
— Әй, иптәш, ҡуҙғал!
Иптәш командир! Беҙҙең ай
Бүленеп ҡала;
Ҡотҡарайыҡсы тиҙерәк,
Бирсе команда!
Тартып сығарайыҡ айҙы
Болот аҫтынан,
Бырғытайыҡ килмешәкте
Айҙың аҫтынан.
Ҡыуайыҡ уны киләсәк
Таң ҡосағынан...»
Шәүләләр... шәүләләр тыуасаҡ
Ҡояш яғынан.

28 февраль, 1943 йыл.

---

## ҮЛМӘҪБАЙ

### 1. ҮЛМӘҪ БАЙ ҺУНАРЫ

Минең яҙғанды уҡығас,
«Әкиәт», — тимә, ҡоҙа,
Бына ул усаҡ янында
Сылғау киптереп тора —

Урал батыр тоҡомонан
Үлмәҫбай атлы егет,

Иҙел — эсә һыуын эскән,
Салауат затлы егет...

Тирәләп халҡ ултырған,
Уртала усаҡ яна,
Ситтәрәк ҡулы бәйләнгән
Офицер тулап ята.

Үлмәҫбай һирәк мыйығын
Ҡапыл тырпайтып ала,
Ҡыҫыҡ күҙен ҡыҫа төшөп,
Хәйләкәр ҡараш һала.

Ул офицерҙе йыуата:
«Һин тыпырсынма, ҡуян,
Хәҙер ошо сылғау менән
Ағасҡа аҫып ҡуям»...

Гөж килә ағай-энеләр:
— Хәйләкәр һин, Үлмәҫбай,
Был йәнлекте ҡайҙа тоттоң?
Һөйләп ташласы давай!

Инәлдерергә яратмай,
Тел асҡысы — теләге;
Үлмәҫбай тыңлаусыларға
Ошо хәлде һөйләне:

«Һунарсы минең ырыуым,
Һунарсы ата-бабам,

Һунарсы ҡаны үҙемдә,
Һунарсы булыр балам.

Ғәҙәт — ҡылыҡтың энеһе,
Бик ғәжәп бит ул ғәҙәт,
Һунар сыға һалыуыма
Шул ғәҙәт булды сәбәп.

Хазина ине уҙған тән,
Йондоҙлб, айлы ине,
Немецкә тоҙаҡ һалырға
Бигрәк тә яйлы ине.

Күкрәкләнеп сығып киттем,
Ергә лә теймәй табан, —
Әйтерһең, тыуған Уралға
Ҡунаҡҡа ҡайтып барам.

Тегеләр яғына еткәс,
Ҡулды күтәргән булам,
Йәнәһе шартын килтерәм
(Хәйлә кәрәк бит, туған).

Хәтерләп алдым кемдеңдер
Шунда ата-әсәһен,
Үҙем ҡысҡырам: «Гитлер, — тим, —
Дөмөккәнсе йәшәһен!»

Һалдаттар килеп, кеҫәне,
Ҡуйынды һәрмәп ҡарай,

Ә еңгә күҙ төшөрөргә
Баштары етмәй, малай.

Бер заман себен шикелле,
Алдылар мине ҡамап:
— Үҙең теләп нәрәтәгә
Килеп индеңме, сабаҡ?

— Офицергә илтегеҙ! — тим,
Гәп һатырға ваҡыт тар,
Берәй ғәмәлгә ярарлыҡ
Һүҙ әйтеп һалыуым бар.

Штабҡа илтәләр. Күрәм
Дейеүгә хас бәндәне.
Ошо күрәһең быларҙың
Офицер тигәндәре.

Доклад яһайым үҙенә:
— Үлмәҫбай атлы булам,
Тау башҡорто тоҡомонан,
Салауат затлы булам.

Икәүҙән-икәү ҡалабыҙ,
Беребеҙ — күҙ, беребеҙ—ҡаш;
«Башҡорт? башҡорт... Ул мығырҙай,—
Ниндәй хайуанға оҡшай?»

Яуапты тапҡыр ҡайтарам:
— Ғәфү итегеҙ мине,

Немец башын ҡырт-ҡырт ҡырҡҡан
Ана шул башҡорт инде.

Әле һин тыумаған саҡта
Берлингә ингән тоҡом,
Ата-бабаларың яуын
Ҡүмәкләп енгән тоҡом.

Офицер и боларынып
Ҡыҙып китә шул саҡты,
Шым ғына ҡулға төшөрәм
Мин дә ике «туҡмаҡты».

— Тауышты яратмайым, — тим, —
Ҡиммәт бит һиңә ғүмер.
Бына күрәһеңме быны?
Мин көл булһам, һин — күмер!

— Һин шаянға оҡшайһың, — ти,
Мин әйтәм: «Алаймы ни,
Эш мәлендә шаярырға
Штанһыҙ малаймы ни?

Бына һеҙҙе тар-мар иткәс
Илдә һабан туй булыр,
Туй мәлендә шаярырға,
Уйнарға ла уй булыр.

Ә хәҙергә наганыңды
Өҫтәлгә сығарып ҡуй,

Күңеленә төшөүе бар
Бер-бер төрлө ҡара уй».

— Атырмын! — ти. Ә мин уға:
— Ҡиммәт бит һиңә ғүмер.
Бына күрәһеңме быны?
Мин көл булһам, һин — күмер.

Аяғын тибеп екерҙе,
Ҡалтырап китте иҙән,
Наганын ырғытып бәрҙе:
— «Ни кәрәк һиңә минән?»

— «Тағы бер тауыш сығарһаң
Тешеңде емерермен,
Һөйәгеңде он итермен,
Йәнеңде көйҙөрөрмөн!

Вот шулай. Хәҙер үҙеңде
Ҡунаҡҡа алып китәм,
Аҙаҡтан маҡтап йөрөрһөң:
— «Башҡорт ҡунаҡсыл икән!..»

Йәнәшә сығып китәбеҙ,
Бик эре сирттерәбеҙ —
Йәнәһе начальник менән
Постарҙы тикшерәбеҙ.

Беҙ үтәбеҙ. Ә һалдаттар
Сәләмләй тура ҡатып,

Тик ай ғына шул сағында
Ҡайҙалыр ҡалды батып.

Һөйләгәндең гамсыһы ла
Әкиәт түгел, туған,
Ана ул ята. Ә үҙем
Сылғау киптереп торам».

Урал батыр тоҡомонан,
Үлмәҫбай атлы егет,
Иҙел — инә һыуын эскән
Салауат затлы егет.

## 2. ҮЛМӘҪБАЙ ТУЙҒА БАРА

— Тауыҡтар төнәгән мәлдә
Һунарҙан ҡайтып киләм.
Теребайҙың саптарынан
Арттараҡ ҡалды ерән.

Буш теҙгенде һиҙеп буғай,
Баштарын сайҡай атым,
Уҡып барам Гөлзифаһың
Уралдан яҙған хатын:

«...Һин — егеттәрҙең егете,
Минең Үлмәҫбайғынам,
Бер һинең өсөн шатланам,
Берсә тағы ҡайғырам.

Иҫ киткес батырлығыңа
Һоҡлана Урал иле;

Тик бына шул хаттарынды
Йышырак яҙһаң ине...

Осоп барып күрер инем
Канаттар булһа икән,
Ошо сәләм хатын яҙҙы
Һин һөйгән кыҙ —
Гөлбикән...»

Капыл юлыма карт басты:
— Һаумы, Үлмәсбай таныш?
Үҙе биш карыш самаһы,
Һакалы етмеш карыш.

— Башкорттоң егетенә, — ти, —
Партизанский сәләм,
Үҙе мине мактап китте:
Фәлән — фәсмәтән, төгән...

— Сер итеп кенә әйтәм, — ти, —
Колағыңа һала куй,
Төгән төндә, төгән ерҙә
Немецтәр типтерә туй.

Мир башы кыҙы немецкә
Ул көн кейәүгә сыға.
Һакалым менән инәләм
Һүҙемде йыкма, коҙа!

Кемгә тейә быйдай хөрмәт?
Әлеге лә баяғы?

Хәстәрен күр. Беҙҙә тиһәң
Наҡыҫыраҡ һый яғы.

Әйткән һүҙ — атҡан уҡ булһын,
Мин үҙем ныҡыш бәндә.
Ошо төштә көтәм һине
Тауыҡтар төнәр мәлдә.

Ауыҙ асып яба алманым
Һыу булып һеңде ҡартым.
Туй көтә беҙҙе, туй көтә!
Елдәй ел, ерән атым!

Ҡара урман аша үтә
Бына был серле һуҡмаҡ;
Урман өнһөҙ: йә ул йоҡлай
Йә ул уйлана һымаҡ.

Аҡландар тулып сайҡала
Бешеп өлгөргән арыш.
Ҡем урыр, кем кәбән ҡойор,
Эй арыш, башы ҡарыш!

Уттар йәшел йылан булып
Үрмәләп күккә менә,
Йә ҡыҙыл ҡарлуғас булып
Ҡапыл ҡыйпылып һүнә.

Тар һуҡмаҡ киңәйгән ерҙә,
Үткәс урман аҡланын,

«Ә» тигәнсе ҡыуып еттем
Теребайҙың саптарын.

Ҡыуаныстан һөрән һалам
Ҡаушап китте Теребай:
— Юлда бәхет аунап ята
Эштәр әкәмәт, малай!

Башта төшөнмәй маташа
«Башым, — ти, — тубал бөгөн!»
Һөйләп бирҙем Теребайға,
Мәсьәләнең елеген.

Саҡ-саҡ болотҡа теймәне
Теребайҙың кәпәсе.
Теребай бит беҙҙең яҡта —
Беренсе туй әтәсе!

Ул кейәү егете икән,
Моғайын ғауға була.
— «Туйҙа, — ти, — көршөк тупәсләү,
Борондан ҡалған йола.

Ил йолаһын, ти Теребай,
Тыу итеп күтәрәйек,
Башҡорттарҙың туй ғәҙәтен
Немецкә күрһәтәйек!

Уларса барып сыҡмаһа
Ғәйеп итмәçтәр әле,
Ашыҡ-бошоҡ эш ҡылынһа...
Ничего, һуғыш мәле!»

Егеттәр теле әйткән һүҙ —
Ҡырҡылып ауған имән,
Таш юлда ла юлда булһын
Саптар ат менән ерән!

Төйөп, төйөп тултырманыҡ
Туй малын һандыҡ, һандыҡ,
Тик йөҙгә ҡыҙыл килмәçлек
Үҙебеҙсә яһандыҡ.

Туй кисе боларып килде
Елләнеп, дауылланып,
Болғана күктә болоттар
Йәшенләп, яуынланып.

Теребайға әйткән булам:
— Күрәһең эштәр ҡалай,
Әллә биргән вәғәҙәне, тим,
Ҡыйшайтабыҙмы, малай?

— Алйот, — тип екрә Теребай, —
Әүрәүҙер һинең башың!

Туй өсөн ошондай кисте
Эҙләп тә таба алмаҫһын.

Егеттәр теле әйткән һүҙ —
Ҡырҡылып ауган имән.
Туй юлына сығып китте
Саптар ат менән ерән.

Әлеге ҡарт ҡаршы ала
— Һаумы, Үлмәҫбай таныш?
Үҙе ете ҡарыш булыр,
Һаҡалы етмеш ҡарыш.

Ҡарт серле таяғы менән
Ҡартлас имәнгә һуға,
Ҡапыл, гүйә ер аҫтынан,
Өс батыр ҡалҡып сыға.

Ҡарт әйтә: — «бына өс улым
Һеҙгә, ти, юлдаш булһын,
Изге мәлгә тап килегеҙ
Ҡәсептәр ундаш булһын!

Алдығыҙҙа йәйәү һуҡмаҡ,
Эйәрҙән һикерегеҙ,
Туй буләген куйындарҙа
Һыуытмай еткерегеҙ».

Туп кайыҙлай болот һыртын,
Телә йәшен камсыһы,
Автоматтан һибәме ни
Эре ямғыр тамсыһы.

Карт калды. Тайғак һукмактан
Барабыҙ башты эйеп,
Ой барабыҙ, көн барабыҙ,
Ай, йыл барабыҙ кеүек.

Тау аҫтында кескәй ауыл
Эт тә юк урамында.
Карттың бер улы күрһәтә:
— Туй була бына бында...

Эйелеп якын киләбеҙ
Өйҙәре бейек кенә,
Бишебеҙ биш себен булып
Биш тәҙрәгә менә.

Эштәр әкәмәт: немецтәр
Ну эре сирттерәләр!
Сүл бүреһе туйымы ни?
Олошоп типтерәләр.

Типтерегеҙ, сирттерегеҙ,
Данлы булһын туйығыҙ!
Кыйланығыҙ, һыйланығыҙ
Татлы булһын һыйығыҙ!

Эскә инеп шаг табынды
Ҡуҙғатырға ҡыймаһыҡ.
Туй бүләге, менән өйҙөң
Дүрт мөйөшөн һыйланыҡ.

Кәйеф боҙоп ишек ҡаҡһаҡ
Ғәйеп итерҙәр һымаҡ,
Беҙҙең һыйҙар кейәүҙәрҙе
Мәйет итерҙәр һымаҡ.

Бер мәлде дүрт епте тарттыҡ
Ҡөл булып осто табын.
Ошонан да мәрәкәрәк
Туй буламы һуң тағы?

Теребайға әйтә һалам:
«Ҡыҙып ташламаныҡмы,
Әрһеҙләнеп туй йолаһын
Боҙоп ташламаныҡмы?».

«Алйот, — ти Теребай, — туйҙа
Мылтыҡтан атыу була,
Һауыт-һаба шалтыратыу
Борондан ҡалған йола.

Табындарын күтәргәнгә
Маҡтап һөйләрҙәр әле:
«Ай-һай-һай бик ирмәк икән
Башҡортта туй әмәле!»

———

ПРОВЕРЕНО
07 СЕН 2016
Подпись

Хаҡы 2 һум 50 тин.

МУСТАЙ КАРИМ

МОЙ КОНЬ

Стихи на башкирском языке